# Март - Буранай

**Күҙәтеү № 1**

Йыл миҙгелдәре алышыуын күҙәтеү.

**Маҡса:** Йыл миҙгелдәренең алышыуын, уның үҙенсәлектәре тураһында белемдәр алыуға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

Март исемле һылыу ҡыҙ

Килтерә беҙгә яҙҙы

Саҡ ҡына илаҡ булһа ла,

Ҡояшлы ул, бик наҙлы.

Март - яҙҙың тәүге айы. Ләкин ҡыш үҙ биләмәләрен һис кенә бирергә теләмәй. Башҡорттарҙың “биш ҡунаҡ”, ”аҡман - тоҡман” тигән зәһәр бурандары ла яҙҙы килтертмәй, тотҡарлап тора. Ләкин яҙ бирешмәй; көндәр оҙая, ҡояшта йылыраҡ ҡыҙҙыра.

Яҙ билдәләрен һанағыҙ. Ниндәй ай хәҙер? Ҡар яҙ көнө нимә эшләй? Яҙ кешеләр тормошонда нисек сағыла?

**Хеҙмәт;** майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу - хеҙмәт шөғөлдәренә күнектереү.

**Хәрәкәтле уйындар: “Түңәрәктә кал”, “Тере лабиринт”** - етеҙлектә, сослоҡта күнектереү. Берҙәм хәрәкәттәрҙең уйынды ойошҡанлыҡ менән уйнарға мөмкинлек биргәнен аңларға булышлыҡ итеү.

**Күҙәтеү № 2**

**Ҡоштарҙы күҙәтеү.**

**Маҡсат** - тәбиғәттә яҙғы үҙгәрештәрҙе күрергә булышлыҡ итеү, турғайҙарҙың ҡыланыштарында яҙ сағылышын күҙәтеү.ҡоштарға хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.

**Эш барышы -**

Бер сәпсек, ҡунып ҡоймаға.
Ҡыйыҡтағы сәүкәләр
Шаҡ - шаҡ итеп бер һайыҫҡан
Саҡыра мине "сыҡ, сыҡ, сыҡ!"
Минән көлгән төҫлөләр.
Ниҙер әйтте ҡарғаға
Яҙ ҡайтты тип, доньяға ,
Сөнки саңғы эҙҙәренән
Ҡарға көлдө "инде ваҡыт
Тамсы тама тып, тып, тып.
Сәпсектәр һыу эстеләр.
Ултырырға арбаға." (М.Ғәли)

Әҙ генә йылытҡайны турғайҙар сырҡ килешеп туптарға йыйылып ерҙә һикерешә башланылар, ҡыуанышалар, бер турғай күләүек тапһа тиҙ генә йыуынырға, сумырға тотона.улар нимә менән оя төҙөйҙәр? (кипкән үлән, мамыҡ, ҡауырыйҙар менән ) уларға оя нимәгә кәрәк ул? (йомортҡа һалалар һәм аҙаҡтан балаларын - ҡошсоҡтарын сығаралар) турғайҙар уларға нимә ашаталар? (бөжәктәрҙе ашаталар)

**Хеҙмәт** - сәскә түтәлдәрен ҡыйҙан таҙартыу.

**Х/У “Кем тиҙерәк” -** йүгереүҙә күнектереү, етеҙлек, таҫыллыҡ тәрбиәләү.

**Уйын - күнегеү** - тиҙәйткес ятлау.

Өйгә ингән сыпсыҡ,

Осоп йөрөй сыпсыҡ,

Сыҡ - сыҡ, сыҡ - сыҡ,

Сыҡ, сыпсыҡ!

## Күҙәтеү № 2

**Ҡояшты күҙәтеү**

**Маҡсат** - ҡояш системаһының үҫемлектәр, хайуандар ,кешеләр тормошона йоғонтаһы тураһында белемдәрен барлау.

**Эш барышы** - ҡанатһыҙ бер ҡош - утмы әллә, күктәрҙе гиҙгән ҡояш.

Шаян ҡояш нурҡайы

Шаяра, көлә, уйнай

Көн буйы уйнап туймай. (Д.Талхина)

Ҡояш юғарыраҡ торған һайын йылыраҡ һәм көндәр оҙонораҡ, ҡар ирей, ер йылына, яйлап үлән үҫә башлай.тәбиғәттә нимә барлыҡҡа килә?

Ҡояш ҡайҙа сыға һәм ҡайҙа байый?

**Тикшереү - тәжрибә эше** - тимер предметтарҙы тотоп ҡарау – ҡояш ҡайһы ерҙәрен нығыраҡ йылыта? Нимә менән ҡояшҡа оҙаҡ итеп ҡарап тороп була?

**Хеҙмәт** - бордюрҙарҙы һеперерп сығырға - ярҙам итеү теләге тыуҙырыу.

**Х/У ”Ҡояш һәм планеталар”** - ҡояш тирәһендәге планеталарҙың хәрәкәттәрен ҡабатлау.

**Уйын - күнегеү** - урындан оҙонлоҡҡа һикереү - һикереүҙә,көстә күнектереү.

## Күҙәтеү № 3

**Ҡар иреүен күҙәтеү**

**Маҡсат**-тәбиғәттәге үҙ-ара бәйләнеште аңларға булышлыҡ итеү**.**

**Эш барышы:**

Төндә апрель ҡыйыҡтарға

Элеп ҡуйҙы боҙбармаҡ.

Тик ҡояшҡай боҙбармаҡты

Әйләндерҙе тамсыға.

Балаларҙың иғтибарын иртәнсәк ҡар өҫтөнә ҡатҡан боҙ ҡатламына йүнәлтеү, көндөҙ ҡар өҫтө ныҡлап ирей, ә төндә ҡар туңа.

**Тикшереү - тәжрибә эше -** көрт эсендәге ҡарҙы, ирегән йомшарған ҡарҙы һәм күләүектәге һыуҙы ҡарап сағыштырыу.

**Хеҙмәт** - Тәрбиәсе менән ҡороған ҡыуаҡтарҙы секатор менән ҡырҡып ташлау - ярҙамлашыу теләге тыуҙырыу.

**Хәрәкәтле уйын "Кәзә менән бүре"** - түңәрәкте боҙмай йөрөргә һәм йүгереүҙә күнектереү.

**Уйын - күнегеү** - уң һәм һул ҡул менән туп ташлау - етеҙлектә, түҙемлелектә күнектереү.

## Күҙәтеү № 4

**Боҙбармаҡтарҙы күҙәтеү.**

**Маҡса:** һыуҙың үҙенсәлектәре менән таныштырыу, экологик фекерләүҙе, күҙҙалауҙы үҫтерергә булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

Тамсы тамды,”тып” итте,

Күк тауыҡ ҡурҡып китте

Ә ҡояш көлөп тора,

Боҙ һөңгө ireп тора.

Тамсы йырлай;”ҡайҙа ла

Миңә хәҙер юл асыҡ

**Күҙәтеү №**

Берәү, икәү...тып.тып,

Яҙ килде - урамға сыҡ".

- Балалар боҙбармаҡтар йорттоң ҡояшлы яғында барлыҡҡа килә.Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Боҙбармаҡтарҙы тотоп ҡарағыҙ әле - улар ниндәй? ( шыма,
- ҡытыршы. Үтәнән - үтә күренеп тора) Боҙбармаҡ ниндәй формала? Ни өсөн
- ул аҫҡа ҡарай үҫә?

**Хәрәкәтле уйындар "Тамсылар", "Тере лабиринт"** - ике рәттә торорға.

Түңәрәк яһарға, берҙәм хәрәкәттәрҙең уйынды ойошҡанлыҡ менән уйнарға мөмкинлек биргәнен аңларға булышлыҡ итеү.

**Уйын-күнегеү** – тигеҙлеккә хәрәкәттәр башҡарғанда хәүефһеҙлеккә иғтибар итергә.

**Күҙәтеү № 6**

**Тумыртҡаны күҙәтеү.**

**Маҡсат;** Тумыртҡаның тышҡы ҡиәфәте.йәшәйеше ,туҡланыуы,ғәҙҙәттәре тураһында белемдәр биреү.ысынбарлыҡ менән таныштырыу.

**Эш барышы**

Көн буйы туҡ та туҡ.

Ағастан ҡорт табып туҡ.

Ағасты йырған ҡортка

Иң ҙур дошман...(тумыртҡа)

Иртән тора ла тумыртҡа

Ағас барабан ҡаға.

Уның дәртле тауышынан

Һәр кем йыуаныс таба.(Г.Юнысова)

Тумыртҡалар ҡайҙа ҡышлайҙар? Яҙ көнө тумыртҡалар нимә ашарға яраталар? Тумыртҡа үҙенә нисек оя ҡора? Ни өсөн тумыртҡаларҙы “урман табибтары” тип атайҙар?

**Хеҙмәт:** веранданы сүп сарҙан таҙартыуға булышлыҡ итеү. Таҙалыҡҡа, бөхтәлеккә ылыҡтырыу.

**Хәрәкәтле уйындар**:”Аҡ тирәк, күк тирәк” - тән мускулдарын төрлө хәрәкәткә йәлеп итә, быуындарҙың хәрәкәтсәнлеген арттыра, сәм һәм дуҫлыҡ тәрбиәләү.

**Хәрәкәтле уйындар**;”Бура һуғыу”-хәрәкәттәрҙең координацияһын, һуғыу көсөн үҫтереү.

## Күҙәтеү № 7

**Уҫаҡты күҙәтеү.**

**Маҡсат:** уҫаҡ ағасы тураһында белемдәрен киңәйтеү, бөрөләр менән таныштырыу.

**Эш барышы;**

- Ҡышҡы ҡарағайға ҡарап,

Көрһөнөп әйтте Уҫаҡ;

- Их,ниндәй шәп булыр ине,

Беҙ ҙә гел йәшел булһаҡ!

Аҡ тунлы уҫаҡҡа ҡарап,

Яуап бирҙе Ҡарағай;

- Беҙҙең гел йәшел торғанға

Ҡыҙығырға ярамай.

Миҙгел һайын яңы күлдәк

Кейәһең бит, һин, Уҫаҡ.

Беҙ ҙә шулай йәшәр инек,

Һинең һымаҡ бай булһаҡ. (Г.Юнысова).

Яҙғы ҡояш йылытыу менән уҫаҡтың йәшел ботаҡтарында һоро ғына бөрөләр барлыҡҡа килде, унан һуң алҡалар ҙа аҫылынып торҙолар.күптә үтмәй йәшел генә япраҡтарҙа барлыҡҡа киләсәк. Ни өсөн уҫаҡ япраҡтары һәр ваҡыт һелкенеп тора?

**Хеҙмәт:** көҙҙән ҡалған япраҡтарҙы йыйып алыу-күмәк хеҙмәттән кинәнес тойғоһо алырға булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйындар**:”Хәйләкәр төлкө”, “Турғайҙар” - һибелеп йүгереүҙә күнектереү, етеҙлектә, сослоҡта күнектереү.

**Уйын-күнегеү** “Кем алыҫҡараҡ ташлай” - сәпкә ташлауҙа күнектереү. Тиҙ реакцияла күнектереү.

## Күҙәтеү № 8

**Ҡайындың бөрөләрен күҙәтеү.**

**Маҡсат**: ҡайын ағасы менән таныштырыуҙы дауам итеү, яҙ көнө ниндәй үҙгәрештәр кисергәнен асыҡлау.

**Эш барышы:**

Аҡлан тирәләй ағастар

Ҡалҡынғандар юғары

Ә уртала ике ҡайын -

Иң зифаһы шулары.

Еңел генә сайҡалышып.

Ҡулды ҡуйып бөйөргә,

Улар, гүйә, төшөп киткән

Ел көйөнә бейергә. (М.Дилмөхәмәтов)

- Был ниндәй ағас? Яҙ көнө ҡайын ағасы ниндәй үҙгәрештәр кисерә? Бөрөләре ниндәй?

**Хеҙмәт;** ҡалған таҙа ҡарҙы иретеп гөлдәргә һыу әҙерләү.

**Хәрәкәтле уйындар; "Өйһөҙ ҡуян"** - сигнал буйынса йүгереүҙә күнектереү, етеҙлектә, сослоҡта күнектереү.

**Хәрәкәтле уйындар: "Буяу һатыш"** - иғтибарлылыҡты үҫтереү, уяулыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләү.

**Уйын – күнегеү** - самокаттарҙа йөрөү - тигеҙлекте һаҡларға күнектереү,

батырлыҡ тәрбиәләү.

## Күҙәтеү № 9

**Ҡояшты күҙәтеү.**

**Маҡсат:** йәнле йәнһеҙ тәбиғәт араһындағы миҙгелдәр алмашҡанда ниндәй үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүен аңларға булышлыҡ итеү. Ҡояштың тере йән эйәләренә булған йоғонтаһы тураһында белемдәр биреү.

**Эш барышы:**

Шаян ҡояш нурҡайы

Тыңлай ҡайын йырҡайын,

Һәр япраҡка тейеп үтә,

Һәр япраҡка бейеп үтә.

Шаяра. көлә, уйнай

Көн буйы уйнап туймай. (Д.Талхина)

- Бөтә тереклек өсөн иң мөһиме-ҡояш булып тора.ул йылылыҡ, яҡтылыҡ, көс бирә.Яҙ ҡояш көндән-көн бейегерәк күтәрелә һәм ерҙе йылыта.

- Яҙ килгәнен ҡайҙан белдегеҙ?

- Ҡояш яҡты янғанда үсемлектәрҙә ниндәй үҙгәрештәр барлыҡҡа килә?

**Хеҙмәт;** ҡалҡан ҡарҙы ҡыуаҡтар төбөнә ташлау - үсемлектәр тураһында

хәстәрлек күрергә булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйындар;** “Тупты тот” - тупты тоторға һәм бер - береһенә тиҙ

генә биреүҙә күнектереү.

**Хәрәкәтле уйындар: ”Энә менән еп” -** иғтибарлылыҡ һәм етеҙлектә

күнектереү.

## Күҙәтеү № 10

**Болоттарҙы күҙәтеү.**

**Маҡсат: -** доньяны бер бөтөн итеп аңларға һәм ҡабул итергә булышлыҡ итеү.

Болоттарҙы күҙәтергә һәм һоҡланырға күнектереү.

**Эш барышы:**

- Зәңгәр күктә бөркөт оса, күләгәһе ерҙе ҡоса (болот)

Тауҙай болот батшалығы

Минең башым осонда

Ул туктауһыҙ түгелеп илай,

Күҙ йәштәре - усымда.

Уҫал ел уны баҫтыра,

Буҫығып һыҡтай болот.

Уны йәлләп ҡарап торам,

Зонтик аҫтына боҫоп. (И.Илебәтова)

- Күккә ҡарағыҙ әле - нимәләр күрәһегеҙ? Болоттар ниндәй бөгөн? Нисек уйлайһығыҙ - бөгөн ямғыр йә ҡар яуамы? Ҡайһы яҡҡа йөҙәләр болоттар?

**Уйын - күнегеү:** велосипедта йөрөргә булышлыҡ итеү - хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫтән сығармау.

**Хеҙмәт:** бәләкәстәр төркөмөнә уйынсыҡтарҙы йыйышырға ярҙам итеү

**Хәрәкәтле уйындар**: ”Класстар” - бер аяҡлап һикереүҙе камиллаштырыу, бәләкәй арауыҡта йүнәлеш табырға булышлыҡ итеү.

**Хәрәкәтле уйындар**: Иғтибарлылыҡта күнектереү, етеҙлек, уяулыҡ, йылдамлыҡ тәрбиәләү.